# ЯУГИР ШАҒИР



Әхмәт Рафиҡов — «Аҡмулла» әҙәби берекмәһенең иң оло һәм абруйлы ағзаһы. Ул бөгөн 86 йәш менән бара. Шундай өлкән булыуына ҡарамаҫтан, матурлыҡ донъяһы — әҙәби ижад эшенә һис кенә лә битараф түгел. Биш йыл аралашыу эсендә мин шуға нығыраҡ ышандым.

Силәбе ҡалаһының «ижад һәм сәнғәт ҡаҙанына» әүерелә барған Ш.Бабич исемендәге милли китапхана, унда ойошторолған әҙәби берекмә осраштырҙы беҙҙең юлдарҙы. Бөгөн Әхмәт Рафиҡов менән әҙәби ижад юлында бергә барабыҙ. Беҙ уның менән фекерҙәштәр ҙә, юлдаштар ҙа, табындаштар ҙа.

Ошо аралашыу мәлендә мин үҙем өсөн өр-яңы донъя астым. Ул — шағир-фронтовик Әхмәт Рафиҡов донъяһы. Иң беренсе шуға иғтибар иттем: уның күҙҙәре һәр саҡ нурлы, ә йөҙө ихласлыҡ бөркөп тора. Ысын ижад кешеһенә генә хас сабырлыҡ, тыйнаҡлыҡ һәм олпатлыҡ сифаттары һыйыша унда.

Әхмәт Рафиҡовты мин шағир-фронтовик тип атайым. Был баһа уға нығыраҡ тура килә, сөнки ул, утһыуҙар кискән ил һалдаты булараҡ, тормошта ла бер ҡасан үҙенең уяулығын ташламаны. Ватанға тоғролоғон, халҡы алдындағы яуаплылығын, граждандыҡ бурыстарын шиғри анттары аша иштеттерә торҙо.

1996 йылда «Күңелдәге уйҙар» тигән шиғри йыйынтығын әҙерләп сығарҙы. Унда уның башлыса матбуғатта донъя күргән әҫәрҙәре тупланған. Фронтовик-шағирҙың күңел йәдкәрҙәре хаҡында ошо китап буйынса фекер йөрөтөргә мөмкин.

«Күңелдәге уйҙар» йыйынтығы төҙөлөшө буйынса ете тематик төркөмгә бүленгән: «Мин һинең улың», «Төҙәтеп булмай тиҙәр... тарихты», «Күңелдәге уйҙар», «Оноторға мөмкин түгел», «Тормош даръяһында», «Төрлө дәфтәрҙән», «37-се йыл дәфтәренән». Бүлектәрҙең атамалары буйынса ғына ла уларҙа нимә хаҡында һүҙ барыуын төҫмөрләргә мөмкин.

1941-1945 йылдарҙа яҙылған шиғырҙарында утлы йылдар ауазы бигерәк тә көслө ишетелә. Ватан һалдаты образы баҙыҡ сағыла. 1944 йылда яҙылған «Десна буйы» шиғырында ул былай ти:

Төнө буйы бында һуғыш барҙы,
Таң алдынан дошман сигенде.
Брянски бөгөн беҙҙең ҡулда,
Шунан да ҙур шатлыҡ юҡ инде.

Эйе, Ватан һалдаты өсөн дошманды еңеүҙән дә ҙур шатлыҡ юҡ. Һуғыш осоро шиғриәте, ғөмүмән, әҙәбиәте һүҙгә бик һаран. Әхмәт Рафиҡовтың да шиғырҙарында

өмөт-ышаныслы, шатлыҡлы хистойғоларҙың күңел түренән бәреп сығыуы бик тә тәбиғи хәл. Ошо һаран ғына шиғыр юлдары үҙҙәре заман һулышы түгелме ни!

Һуғыш осоро шиғриәтенә күҙәтеү яһағанда күҙгә шул ташлана: хат формаһында ҡоролған әҫәрҙәр байтаҡ ижад ителгән. М.Кәрим, Р.Нигмәти, М.Харис, Х.Ҡунаҡбай, F.Байбурин, Т.Арыҫлан һәм башҡа шағирҙарҙың шиғри хаттары шуға асыҡ дәлил. Иң ҡулай поэтик форма һаналған шиғри хат Әхмәт Рафиҡов ижадында ла бар. «Фронттан хат» тигән шиғырында:

Мин был хатты яҙам алыҫ илдән,
Үлем һуғышы барған ҡырҙарҙан.
Сәләм яҙам халҡым улдарына,
Батырҙарҙан — һуғышсыларҙан,

— ти шағир. Артабан «фашизмдың ҡанлы закондарын ер йөҙөнән һепереп түгергә» ант итә. Шиғырҙа лирик герой оптимистик рухта, еңеүгә ынтылышлы булып кәүҙәләнә. Шуға ла шиғырҙың лейтмотивында:

... Беҙ ант иттек еңеү яулап,
Берлин аша илгә ҡайтырға!

Шағирҙың теләге ошо шиғырҙағыса ҡабул булды. Ул еңеү яулап Берлинғаса барып етте, иҫән-имен тыныс тормошҡа ҡайтты. Ләкин шағир тыныс тормошта ла ауыр һуғыш йылдары һалған кисерештәренән айырылып китмәне, киреһенсә, йылдар алыҫая барған һайын һуғыш трагизмы темаһына эленән-әле ҡайтты, «Оноторға мөмкин түгел», «Һуғыштар менән булышмағыҙ», «Һалдат миҙалдары» һ.б. шиғырҙарында үҙ тауышын ишеттерә торҙо.

Хәтеремдә, һаман хәтеремдә,
Оноторлоҡ түгел ул саҡты.
Беҙҙе генә түгел, аттарҙы ла,
Аттарҙы ла һуғыш илатты, —

тигән хәтирәләргә бирелә һуңғараҡ Ватан һалдаты.

Әхмәт Рафиҡов үҙенсәлеклә шағир. Уның үҙенә генә хас тауышы бар. Төрлө йылдарҙа яҙылған әҫәрҙәре шағирҙың күңел йылыһы менән һуғарылған. Тыуған иленә, уның тәбиғәтенә һәм үҙен уратып алған кешеләренә мөнәсәбәте асығыраҡ ишетелә. Йылдар аша шағир тауышы тағы ла көслөрәк яңғырай барҙы.

И, гүзәл тыуған яҡтарым,
Һыуҙарым, шишмәләрем,

— тип наҙлап өндәште ул тыуған яҡтарына. Ғәзиз ереңә баш эйеүҙән, эскән шишмәне ҡәҙерләүҙән башланалыр ул донъялағы оло эштәр.

Әхмәт Рафиҡов шиғырҙарында Тыуған ил, Ватан темаһы үҙәк темаға әйләнде. Шуға ла ул Ватан тураһында уйланып, былай тип яҙҙы:

«Илен юйған ул», тип һөйләмәгеҙ,
«Илен һатҡан» булыр дөрөҫ һүҙ.
Илен юйған кеше кешеме ни!
Эттәр генә була Ватанһыҙ.

Халыҡ яҙмышы, уның киләсәге хаҡындағы борсолоулы уйҙар шағир күңеленә тынғылыҡ бирмәй. Тыуған илдең гүзәллеген данлауҙан башланған шиғырҙарын артабан милләт яҙмышы темаһы алмаштыра барҙы. Һуңғы осорҙа барған милләт һәм туған тел яҙмышына ҡарата шағир «Төҙәтеп булмай тиҙәр... тарихты» (1993) шиғырында:

...Беҙ боронғо халыҡ!
Иле, ере булған,
Үҙ дәүләте булған милләтебеҙ!
Ниңә әле беҙ йәшәргә тейеш
Телһеҙ, динһеҙ ҡалып, дәүләтһеҙ! —

тигән риторик һорау ҡуйҙы, үҙенең граждандлыҡ позицияһын аңғартып. Шағир бөгөн иле, халҡы өсөн нығыраҡ борсола, уның шатлығы һәм ҡайғыһы менән йәшәй.

Әхмәт Рафиҡов — лирик шағир. Уның граждандлыҡ, тәбиғәт, мөхәббәт лирикаһын төрлө йылдарҙа ижад ителгән байтаҡ йырҙары тулыландыра. «Мин һинең улың», «Айһылыуым», «Көт мине», «Ниңә һуң» һәм башҡа йырҙары шағирҙың күңел донъяһын тулыраҡ яҡтырта, һағышлы-моңло шағир күңелен асып бирә.

*Ҡамса МОРТАЗИН,*
*«Акмулла» әҙәби берекмәһенең етәксеһе.*